*Зилә ЯППАРОВА,*
*Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының*
*милли мәктәптәр бүлеге мөдире*

# *Туған телде һаҡлап ҡалыр өсөн*

Мәғлүм булыуынса, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Закон ҡабул ителеү һөҙөмтәһендә башҡорт теленә иғтибар бермә-бер артты, сөнки башҡорт теле рус теле менән бер рәттән дәүләт теле итеп иғлан ителде.

Республикабыҙҙа мәғарифты нығытыу өсөн «Мәғариф тураһында» Закон тәүгеләрҙән булып ҡабул ителде һәм бөгөн мәғариф учреждениеларының эшен 150-нән ашыу мөһим хоҡуҡ һәм норматив акттары тәьмин итә. 1998 йылдың декабрендә «Һәләтле балалар», «Етем балалар», «Инвалид балалар», «Балаларҙың ялын, буш ваҡытын ойоштороу һәм уларҙы һауыҡтырыу» кеүек айырым маҡсатлы ярҙамсы программаларҙы үҙ эсенә алған «Башҡортостан Республикаһы балалары» Президент программаһы ҡабул ителде.

1999-2003 йылдарға Башҡортостан Республикаһында мәғарифты үҫтереү һәм 2000-2003 йылдарға Башҡортостан Республикаһында авария хәлендәге мәктәптәргә алмашҡа яңы мәктәптәр төҙөү программалары раҫланды.

Мәғариф министрлығы «Ауыл мәктәбе», 1999-2005 йылдарға Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрендә сығарылған уҡыу әсбаптарының йөкмәткеһен камиллаштырыу, яңы китаптар, уҡытыу-методик ҡулланмалар булдырыу, 1999-2005 йылдарға Башҡортостан Республикаһында мәғариф системаһының педагогик кадрҙарын үҫтереүҙең комплекслы про-

граммаларын әҙерләне. Башҡорт милли мәғарифын үҫтереү концепцияһын һәм уны тормошҡа ашырыу, тағы ла яңы Башҡортостан гражданын формалаштырыу концепцияһын һәм уны тормошҡа ашырыу программаларын тәҡдим итте.

Был документтарҙы ҡабул итеү Башҡортостан үҙенсәлектәренә йүнәлтелгән төбәк мәғариф системаһын булдырыу, донъя стандарттарына өлгәшеү, Рәсәй һәм донъя мәғариф системаһы менән интеграциялау мәсьәләләрен хәл итергә мөмкинселек бирәсәк.

Бөгөнгө көндә республика мәктәптәрендә бөтәһе 14 тел өйрәнелеп, башҡорт, рус, татар, сыуаш, мари, удмурт телдәрендә уҡытыу ойошторолған. Ә 8 тел, йәғни мордва, немец, украин, белорус, грек, йәһүд, латыш, поляк телдәре предмет булараҡ өйрәнелә. Рус милләтенән булмаған балаларҙың 62,4 проценты үҙенең туған телендә уҡый йәки уны өйрәнә.

Республикала башҡорт милләтенән бөтәһе 176176 уҡыусы иҫәпләнә. Шуларҙың 69975-е 852 мәктәптә үҙ телендә белем ала (39,7%). 923 мәктәптә 68025 бала башҡорт телен предмет булараҡ өйрәнә (38,6%). Башҡорт телен 1775 мәктәптә 138000 бала өйрәнә (78,3%). Бындай мәктәптәр һаны уҙған уҡыу йылы менән сағыштырғанда 95-кә артты.

Бөтәһе 2682 уҡытыусы башҡорт телен уҡыта. Шуларҙың 2170-е (80,9%) — юғары, 512-һе урта махсус белемле, 123-өнөң махсус белеме юҡ. 142 кеше ситтән тороп юғары уҡыу йорттарында белем ала. 2000-2001 уҡыу йылында республика мәктәптәренә тағы ла 132 башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары кәрәк буласаҡ. Мәктәптәрҙә барлығы 1120 башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеты булдырылған.

Билдәле булыуынса, республикабыҙҙа 21 ҡала иҫәпләнеп, 176176 башҡорт балаларының 62241-е ҡала мәктәптәрендә белем ала. Әлеге көндә шуларҙың 10958-е туған телендә белем алһа (17,6%), 30951-е башҡорт телен предмет булараҡ өйрәнә (50,2%). Дөйөм алғанда, ҡала мәктәптәрендә бөтәһе 41909 бала теге йәки был формала (телде тәрәнәйтеп, предмет булараҡ, факультатив рәүешендә) башҡорт телен өйрәнә (67,3%). 51 ҡала мәктәбендә бөтә фәндәр ҙә башҡорт телендә уҡытыла, 363 мәктәптә башҡорт теле предмет булараҡ өйрәнелә. Һуңғы өс йылда мәктәптәр һаны ла, уларҙа башҡорт телен өйрәнеүсе балалар һаны ла бермә-бер артты. Ләкин күп кенә ҡалаларҙа башҡорт телен өйрәнеүҙе ойоштороу ҡәнәғәтләнерлек түгел. Миҫалға Бөрө, Благовещен, Бәләбәй, Октябрьский ҡалаларын атарға була. Ыңғай яҡҡа үҙгәреш һөҙөмтәләрен Сибай, Баймаҡ, Мәләүез, Салауат, Стәрлетамаҡ ҡалалары миҫалында асыҡ күрергә мөмкин.

Ҡала шарттарында башҡорт телен өйрәнеүҙе ойоштороуҙың иң мөһим шарттарының береһе — мәктәптәрҙе белгестәр менән тәьмин итеү. Әлеге көндә ҡала мәктәптәрендә бөтәһе 950 башҡорт теле һәм әҙәбәите уҡытыусыһы эшләп, шуларҙың 757-һе — юғары, 193-ө махсус урта белемле, 56-һы ситтән тороп белем ала.

Башҡорт телен уҡытыуҙа, балалар тәрбиәләүҙә, башҡорт халҡының йолаларын тергеҙеүҙә туған тел һәм әҙәбиәт, мәҙәниәт кабинеттары ҙур роль уйнай. Әлеге көндә ҡала мәктәптәрендә 344 башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеттары булдырылған.

Һәр осраҡта урындағы хакимиәт органдары баланың үҙ телен өйрәнеү йәки ошо телдә уҡыуы өсөн шарттар булдырырға тейеш: класс бүлмәләре биреү, дәреслектәр менән тәьмин итеү, уҡытыусылар табыу, торлаҡ мәсьәләләрен хәл итеү һ.б.

Быйыл башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса уҙғарылған 13-сө олимпиадала республиканан ситтә йәшәүсе башҡорт балалары ла үҙ көстәрен һынап ҡараны (Ырымбур, Силәбе, Һамар) һәм һәйбәт һөҙөмтәләр күрһәтте. Олимпиадаларҙа ҡала уҡыусылары ла әүҙем ҡатнаша.

Ҡала уҡытыусылары ла «Йыл уҡытыусыһы» конкурстарында ярайһы уҡ уңыштарға ирешә. Мәҫәлән, уҙған йылдың конкурс лауреаттары исеменә 136-сы башҡорт лицейынан Зәйтүнә Мөхәмәтова, 85-се мәктәптән Ирена Ҡолһариналар лайыҡ булды.

Туған телен һаҡлап ҡалырға теләгән һәр кеше эште үҙенең ғаиләһенән, балаларынан башларға тейеш. Сөнки сабый теле ғаилә мөхитендә асыла, телгә һөйөү, ҡыҙыҡһыныу ҙа ошонда тыуа. Күп зыялыларыбыҙ ҙа үҙ балаларының русса уҡыуын йәтешерәк күрә. Иң мөһиме — башланғыс интеллигенция ҡулында. Үҙ телендә һөйләшеп үҫкән башҡорт балаһын мәжбүри уҡытыуҙың кәрәге лә юҡ. Ул туған телен күңел ҡушыуы, һөйөү тойғоһо менән өйрәнәсәк.

Милли мәктәптең бурысы туған телде өйрәнеү, төрлө фәндәрҙән белем биреү генә түгел. Быуындан быуынға күсә килгән халыҡ тәжрибәһен, әхлағын, традицияларын балаларҙы тәрбиәләүҙә, рухи яҡтан байытыуҙа уңышлы файҙаланғанда йәштәребеҙ киләсәктә үҙ урынын табасаҡ һәм юғары мәҙәниәтле, зыялы шәхес булып үҫешәсәк.